**Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы**
**Бала үҫтереү үҙәге -“Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы**

**Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге**

# “Эт үҙенә нисек хужа тапҡан әкиәтен моделдәр аша һөйләү”

**(Башҡорт төркөмдәре өсөн ойошторолған республика кимәлендәге квалификация күтәреү курсы)**



**Тәрбиәсе**
**Рамеева Г.С**

**Тема:** “Эт үҙенә нисекхужатапҡан?” әкиәтенмоделдәр аша һөйләү.
**Маҡсат**: Балаларҙы моделдәр менән әкиәтте һөйләргә өйрәтеү
**Бурыстар**:
- моделдәр менән әкиәтте һөйләүҙе нығытыу,һорауҙарға тулы итеп яуап бирергә өйрәтеү;
- һүҙлек запасын байытыу, бәйләнешле телмәр үҫтереү;
- уйлау, логик фекерләү , ижади һөйләү һәләттәрен үҫтереү;
- әкиәткә ҡыҙыҡһыныу , хайуандарға һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
**Йыһазландырыу: “**Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?” әкиәтенең моделдәре.

**Ойоштороу**: Сюрприз моменты – уйынсыҡ эт, эт тауышы.

**Ойоштороу белем биреү эшмәкәрлеге барышы**

- Балалар минең яныма килегеҙ түңәрәккә торайыҡ та, бер –беребеҙгә йылмайып , яҡшы кәйефтәр теләп ҡулдарыбыҙҙы ҡыҫайыҡ.Балалар , әйҙәгеҙ хәҙер килгән ҡунаҡтар менән һаулыҡ һорашайыҡ.
(Ишек төбөндә эт тауышы ишетелә).
- Балалар , ниндәйҙер эт тауышы ишетелә түгелме?Ҡарағыҙ әле, балалар беҙгә ниндәйҙер бәләкәй , матур ғына эт аҙашып килеп сыҡҡан.(Балалар этте һыйпап, тотоп ҡарайҙар).
- Балалар, әйҙәгеҙ эткә исем бирәйек. (б-ң яуаптары)
- Әйҙәгеҙ беҙ уға Аҡтүш тип исем ҡушайыҡ.Һеҙгә Аҡтүш исеме оҡшаймы?Әгәр оҡшаһа,Аҡтүш тураһында һөйләп үтәйек.
- Аҡтүш ниндәй?( Аҡтүш - матур, бәләкәй, шаян, уҫал, оҙон ҡолаҡлы, йомшаҡ, тоғро һ.б)
- Аҡтүш нимә эшләй ала? (Аҡтүш - өрә, һикерә, уйнай, шаяра, ырылдай, тешләй, ашай, һөйәк кимерә, өйҙө һаҡлай һ.б)
- Аҡтүш ниндәй хайуан? Тағы ла ниндәй йорт хайуандарын беләһегеҙ?
- Ә ниндәй ҡыр хайуандарын беләһегеҙ?
- Тимәк, йорт хайуаны менән ҡыр хайуандары нимәһе менән айырыла?(йорт хайуандары кешеләр эргәһендә йәшәй, ә ҡыр хайуандары урманда йәшәйҙәр). Тимәк, эт йорт хайуаны,ул ҡайҙа йәшәй? (ул үҙенең ояһында йәшәй, ә ҡайһы бер кешеләр эттәрҙе йортта тоталар.)
- Балалар , Аҡтүш нимәлер әйтергә теләй?
- Аҡтүш ниндәй әкиәттән килгәнен онотҡанда ҡуйған икән. Был әкиәттебелер өсөн, йомаҡтар ярҙам итер. Һеҙ ярҙам итәһегеҙме?
- Йәйен урманда батша, ә ҡышын ҡарҙанда аҫта. (айыу)
- Ниндәй хайуанды урман санитары тип йөрөтәләр? (бүре)
- Ниндәй хайуан урмандағы йәнлектәрҙең батшаһы? (арыҫлан)
- Афарин. Балалар йомаҡтарҙы дөрөҫ итеп систегеҙ.
- Бүре, айыу, арыҫлан – был хайуандар ниндәй әкиәт геройҙары икән?Ә беҙбыл әкиәтте беләбеҙме?( Эт үҙенә нисек хужа тапҡан– тигән әкиәт)

- Афарин.Әйҙәгеҙ түңәрәккә торайыҡ та, әкиәтте иҫкә төшөрәйек.

**Үҙенә хужа эҙләп**
**Аҡтүш киткән урманға**
**Яңғыҙ йәшәүе уға**
**Бик күңелһеҙ булғанға.**
**Ул бүрегә осраған,**
**Алпан- толпан айыуға**
**Осраған ул арыҫланға**
**бик батыр һәм ҡыйыуға**
**Әммә кеше кеүек көслө**
**Бер йәнлектә булмаған**
**Кешенән дә тоғро дуҫ**
**Юҡ тиеп ул уйлаған.**

- Хәҙер урындарығыҙға ултырығыҙ.Аҡтүш һеҙҙе ҡарап ултырыр, ә беҙ бына ошо моделдәр аша әкиәтте һөйләрбеҙ.Әйҙәгеҙ моделдәрҙе иҫкә төшөрөп үтәйек. Иң ҙур таҫма менән беҙ кемде билдәйбеҙ?(кешене), ә иң бәләкәй таҫма менән нимәне билдәләйбеҙ?(этте)
- Әкиәттәр нисек башлана ?
- Кем әкиәтте башлап китә?(бер бала әкиәтте тулыһынса һөйләй,ә балалар әкиәттең башын, уртаһын , аҙағын һөйләйҙәр).
- Ни өсөн эт урманға сығып киткән?(эткә күңелһеҙ, яңғыҙ йәшәгеһе килмәгән, шуға ла урманға үҙенә хужа эҙләп сығып киткән).
- Эткә беренсе булып нимә осраған?(эткә иң беренсе булып бүре осраған).
- Бүре нимәнән ҡурҡҡан? Ни өсөн? (Бүре айыуҙан ҡурҡҡан , сөнки айыу бүренән көслөрәк һәм урман батшаһы).
- Айыу нимәнән ҡурҡҡан? Ни өсөн?(Айыу арыҫландан ҡурҡып ҡасып киткән, сөнки арыҫлан айыуҙан көслөрәк.Арыҫлан йәнлектәр батшаһы).
- Арыҫлан кемдән ҡурҡҡан?ни өсөн?(Арыҫлан кешенән ҡурҡҡан, сөнки кеше –көслө, ҡыйыу, батыр).
- Ни өсөн эт үҙенә кешене хужа иткән?(Сөнки кеше - көслө, аҡыллы, батыр булған . Ул этте үҙенә алған, эткә оя яһап биргән, ашатҡан. Ә эт кешегә ярҙам иткән , өйҙө һаҡлай, тоғро дуҫ).
- Шулай итеп беҙ бөгөн әкиәтте моделдәр аша һөйләнек, тулы яуаптар биргәнегеҙ өсөн һеҙгә Аҡтүш рәхмәт әйтә. Афариндар!

**Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы**
**Бала үҫтереү үҙәге -“Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы**

**Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге**

# “Эт үҙенә нисек хужа тапҡан әкиәтен сюжетлы һүрәттәр буйынса һөйләү”

**(Башкорт төркөмдәре өсөн ойошторолған республика кимәлендәге квалификация күтәреү курсы)**



**Тәрбиәсе :Йыһангирова Г.М.**

**Тема:** “Эт үҙенә нисек хужа тапҡан әкиәтен сюжетлы һүрәттәр буйынсаһөйләү”

**Маҡсат**: әкиәттең йөкмәткеһен ҡулланып сюжетлы һүрәттәр һөйләүкүнекмәләрен камиллаштырыу.

**Бурыстар:**

- һүрәттәрҙе әкиәттең хәл – ваҡиғаһына тап килтереп теҙеп һалыукүнекмәләре формалаштырыу;
- ишетеү һәм күреү, ҡабул итеү һәләттәрен, хәтер үҫтереүгә булышлыҡитеү;

һүҙлекте ҡапма – ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр менән тулыландырыу;

- уйындың ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәү күнекмәләре тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу**: телевизор, эт һүрәте, әкиәт йөкмәткеһе буйынса сюжетлы һүрәттәр, эт тауышы менән аудиояҙма, эт эҙҙәре, эткә йорт төҙөр өсөн моделдәр, фигуралар, дидактик уйын “ Нимә артыҡ?”

**Һүҙлек эше**: ҡурҡаҡ, ҡыйыу, етеҙ.

**Ойоштороу белем биреү эшмәкәрлеге барышы**

Балалаар төркөм бүлмәһендә уйнап йөрөйҙәр. Балалар күрмәгәндә тәрбиәсеэҙҙәр һалып сыға.

- Балалар ҡарағыҙ әле ниндәй эҙҙәр икән?
- Мин һеҙгә йомаҡ әйтәм, ә һеҙ эҙҙәрҙең

хужаһын белегеҙ.Йүгерекләп йөрөр ул,
Ләү-ләү итеп
өрөр ул,
Мал-
тыуарҙы
ҡыуыр ул,
Өйгә һаҡсы
булыр ул.

- **Балалар тимәк нимәнең эҙҙәре икән?**
- Эттең эҙҙәре

*Телевизорҙа эт һүрәте күренә һәм эт өргән тауыш ишетелә.*

- Балалар ниндәй тауыш ул?
- Эт тауышы һ.б.
- Ә бына шаянҡай ҡайҙа инеп йәшеренгән икән?
- Әйҙәгеҙ эттән һорайыҡ, нимә булып китте икән?

**Эт тағы ла өрә (ул һөйләй) Тәрбиәсе уны тыңлап тора ла яуап бирә.**

- Балалар был эт әкитттән килеп сыҡкан икән. Айнур исемле малай эт тураһында әкиәт һөйләгән саҡта буталып киткән. Урман һүҙен балалар баҡсаһы тип алыштырған. Бына эт беҙгә килеп сыҡкан да инде, ул кире әкиәтҡә ҡайтыр өсөн һеҙҙән ярҙам һорай. Ярҙам итә алабыҙмы?
- Балалар эт тураһында ниндәй әкиәт менән таныштыҡ әле?
- Эт нисек хужа тапҡан, һ.б.
- Һәр нәмәнең исеме булырға тейеш, әйҙәгеҙ уға исем ҡушайыҡ.
- Шарик, Рекс, Аҡтырнаҡ,Аҡтүш, һ.б.
- Афарин балалар. Бик күп эт исемдәре беләһегеҙ икән. Эттең түшендә аҡбилдәһе бар, әйҙәгеҙ уға Аҡтүш тип өндәшәйек. **Эт өрә**
- Әлбиттә. Беҙҙе бөгөн бик күп эштәр көтә. **Аҡтүш һин ҡарап ултыр әбеҙҙең балалар һиңә ярҙам итерҙәр. Эт өрә**
- Бына өҫтәлдә һүрәттәр ята.
- Беҙ әкиәтте һөйләйек һәм әкиәттең йөкмәткеһенә тап килгән һүрәттекүрһәтеп таҡтаға ҡуйып барайыҡ.

**Аҡтүш ҡарап ултыра, иғтибарлыраҡ булығыҙ.**

- Аҡтүш, балалар дөрөҫ һөйләнеләрме, һүрәттәрҙе дөрөҫ ҡуйҙылармы?(**эт тауышы сыға**) Афарин, Аҡтүш бик ҡәнәғәт.

Шулай итеп беҙ әкиәттең йөкмәткеһен һөйләнек. Сюжеттарҙы дөрөҫ итепурындаштырҙыҡ.

- Аҡтүш уйнарға ярата. Әйҙәгеҙ беҙ ҙә уйнап алайыҡ. Аҡтүш ҡарапҡыуанып ултырһын.

**Ял минуты “Аҡтүш хужа эҙләгән”**

Үҙенә хужа эҙләп
Аҡтүш
киткән
урманға.
Яңғыҙ
йәшәүе уға
Бик
күңелһеҙ
булғанға. Ул
осраған
бүрегә
Алпан –
толпан
айыуға.
Осраған
арыҫланға
Бик батыр
һәм
ҡыйыуға.
Әммә кеше

кеүек көслө
Бер йәнлек тә
булмаған.
Кешенән дә
тоғро дуҫ
Юҡ тиеп, ул
уйлаған.
-Афарин, балалар Аҡтүштең кәйефтәре күтәрелеп китте.***(Эт өрә)***
Һеҙҙеңуйыныгыҙ уға ла оҡшаны.

*Урындарығыҙға ултырығыҙ. Кәүҙәләр матур, төҙ генә ултырабыҙ*

- Балалар әкиәттә иң батыры кем булған?
- Иң батыры кеше.
- Ә кеше ниндәй икән?
- К
еше
бат
ыр,
Ке
ше
көс
лө
Ке
ше
ҡы
йы
у
Ке
ше
ете
ҙ,
һ.б.
- Был һүҙҙәрҙе тағы бер тапҡыр бергәләп ҡабатлайыҡ әле: ҡыйыу, етеҙ,
- Ә нимә ҡурҡаҡ икән?
- Айыу, бүре, арыҫлан.
- Бүре нимәнән ҡурҡҡан?
- Бүре айыуҙан ҡурҡҡан
- Ә ни өсөн ҡурҡҡан?
- Айыу бүренән көслөрәк булған.
- Айыу нимәнән ҡурҡҡан?
- Ул арыҫландан ҡурҡҡан
- Ә ни өсөн ҡурҡҡан?
- Арыҫлан айыуҙан көслөрәк булған

- Арыҫлан кемдән  ҡурҡҡан?
- Ул кешенән ҡурҡҡан
- Ә ни өсөн ҡурҡҡан?
- Кеше көслө булған
- Тимәк Кеше бөтә йәнлектәрҙән дә көслөрәк булған
- Афарин, балалар Аҡтүш һеҙҙең яуаптарығыҙға бик ҡыуана. ***(Эт өрә.)***
- **Аҡтүш тағы бер уйын алып килгән**

**Дидактик уйын “Нимә артыҡ?”**

- Был уйын “Нимә артыҡ?” тип атала.

**(Әкиәт сюжеты буйынса һүрәттәр ҡуйылған. Әкиәттең йөкмәткеһебуйынса ниндәйҙер сюжеты артыҡ)**

- Иғтибар менән ҡарап сығығыҙ һәм һүрәттәрҙә ниндәй сюжет артыҡбулыуын әйтегеҙ.
- Ни өсөн был сюжетты һайланың?
- Әкиәттә ҡуян булмаған.
- Афарин. Әкиәт сюжетын бик яҡшы беләһегеҙ икән?

- Был эште лә үтәп сыҡтығыҙ. Урындарығыҙға ултырығыҙ
- Балалар әкиәттә ниндәй ҡыр хайуандары тураһында һөйләнек?
- Бүре, айыу, арыҫлан.
- Уларҙы ни өсөн ҡыр хайуандпары тип әйтәбеҙ.
- Улар урманда йәшәй.

- Балалар, ә эт йорт хайуанымы әллә ҡырағай хайуанмы? *(Балаларҙыңяуаптары*)
- Ни өсөн?
- Кеше янында йәшәй, өйөндә йәшәй.
- Ә ни өсөн эткә хужа кәрәк булған һуң?
- Сөнки яңғыҙ

йәшәгеһе килмәгән,
Сөнки уға дуҫ кәрәк
булған,
Сөнки уға күңелһеҙ булған, һ.б.

- Афарин балалар. Кеше генә түгел, ә хайуандар ҙа яңғыҙ йәшәй алмай, уларға яҡын дуҫтар кәрәк. ***(эт өрә)*** **Беҙҙең һүҙҙәргә Аҡтүш тә ҡушыла.**
- Шулай итеп, эт менән кеше дуҫтар, улар һәр ваҡыт бергә. Эт ысынлап та кешенең йортон һаҡлай, кешегә иптәш тә. Кеше лә уны бик яҡшы ҡарай, ашата.
- Балалар, ә беҙ Аҡтүшкә ярҙам итә алдыҡмы?
- Әйе.
- Ә нисек ярҙам иттек?
- Һүрәттәрҙе теҙҙек, әкиәт һөйләнек.

- Аҡтүш  хәҙер үҙенең әкиәтенә кире әйләнеп ҡайта аламы?
- Ул беҙгә рәхмәт әйтә. Хушлаша.
- Һау бул Аҡтүш.
- Тимәк, беҙгә, хайуандар тураһында һәр ваҡыт ҡайғыртырға кәрәк, шул ваҡытта улар ҙа беҙгә изгелек менән ҡайтарырҙар.. Әйҙәгеҙ, беҙ һеҙҙең менән эт өсөн оя эшләйек.

**Эшмәкәрлек дауам итә.**

Балалар төҙөлөш материалдарынан эткә йорт эшләйҙәр.